# Монасипова
# Гөлсөм Мөбәрәк ҡыҙы,

**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,**
**«Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2017» конкурсы еңеүсеһе,**
**«Төбәк-ара башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы конкурсы - 2017» конкурсы финалисы,**
**Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернаты директоры**

# Дәрестән тыш сара -

конкурсанттың тәжрибәлелеген, уңышлы эшләүен, педагогик һәм методик эшмәкәрлеген сағыу күрһәтеүсе сара. Кластан тыш эшмәкәрлектә эффектив алымдар, саралар, юлдар һайлап алыу һәм ҡулланыу мөһим.

**Конкурсанттың маҡсаты:** дәрестән тыш сара аша профессиональ компетенцияларының кимәлен, ойоштороу, үткәреү һәм үҙанализды эшләй һәләттәрен күрһәтеү

**Урыны:** оргкомитет конкурс үткәреү өсөн һайлаған мәктәп (ББУ)

**Регламенты:** дәрестән тыш сара - 30 минут

Үҙанализ һәм жюриның һорауҙарына яуап биреү – 15 минутҡа тиклем

Дәрестән тыш сараның йүнәлештәрен һәм уның ниндәй класта үткәрелеүен йәрәбә һалғанда беләсәкһегеҙ (ул дәрес биргән көндә үткәреләсәк)

## Дәрестән тыш сараның йүнәлештәре:

-спорт һәм һаулыкты нығытыу;

-рухи-әхлаҡи;

-дөйөм интеллектуаль;

-дөйөм мәҙәни;

-социаль

# Дәрестән тыш сараларҙың формалары-

- класс сәғәттәре
- түңәрәктәр
- студия ултырыштары дәрестәре
- секциялар
- факультатив
- ғилми ойошма
- конференция десанты
- слет
- уйын
- ярыш

- турнир
- осрашыу
- концерт
- спектакль
- экскурсия
- мәҙәни поход
- виртуаль поход
- туристик поход
- субботник
- мәҙәни десант

- конкурстар
- аҙналыҡ, декадник
- батырлыҡ
- акциялар үткәреү
- әңгәмәләр
- йыйылыш
- тимуровсылар
- дискуссиялар
- тренингтар
- гәзит сығарыу

# Дәрестән тыш сараға әҙерләнгәндә

**- ДТС йөкмәткеһен һәм методтарын һайлап алып оптималь ҡулланыу.**

**Уңышлы ДТС структураһын түбәндәге шарттар тәьмин итә:**

**- белем биреүсе, тәрбиә һәм үҫеш маҡсаттарын комплекслы планлаштырыу;**

**- ДТС йөкмәткеһендә һәм темаһында төп, мөһим материалды айырыу;**

**- ДТС этаптарының маҡсатҡа ярашлы эҙмә-эҙлеклелеген билдәләү, материалды үҙләштереүҙең, эшмәкәрлек төрҙәренең рациональ бүленешен тәьмин итеү;**

**- иң ҡулайлы, эффектив методтарҙы, алымдарҙы һәм уҡытыу сараларын һайлау;**

**- уҡыусыларҙың психо-физиологик индивидуаль үҙенсәлектәрен**

# Дәрестән тыш сараға талаптар

- уҡытыусы ДТС темаһын, маҡсатын, бурыстарын аныҡ формалаштырып, үҙенең дә уҡыусыларының да эшмәкәрлеген дөрөҫ планлаштырырға тейеш;

- уҡытыусы проблемалы һәм эҙләнеү ситуациялары ойоштора, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә; тема бөгөнгө көнгә актуаль булырға тейеш;

- уҡыусылар үҙҙәре һығымта яһайҙар;   - дәрес ижади мөхиттә үтә;

- ваҡытты һәм һаулыҡты һаҡлау ҡағиҙәләре үтәлә;

- уҡыусыларҙың белем кимәлен һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алып эш материалы һайлана;

- уҡыусыларҙың психофизиологик, индивидуаль, кластың профиль үҙенсәлектәрен, кәйеф-тороштарын иҫәпкә алына;

- уҡытыусының үҙ методик оҫталығын күрһәтә, файҙалана белеүе;

- кире бәйләнеш булдырыла;     -рефлексия мотлаҡ!

- дәрес ыңғай психологик мөхиттә үтә;

- тел һәм мәғлүмәти хаталарға урын юҡ;

# Быйылғы конкурсанттарға уңыштар теләйбеҙ!